*Приложение №2*
*к рабочей программе по изобразительному искусству, утв. пр. № 116 от 29.08.2022 г.*

Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
средняя общеобразовательная школа
имени Талгата Лутфулловича Рахманова с.Верхнеяркеево
муниципального района Илишевский район Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ СОШ
им.Т.Рахманова с.Верхнеяркееево
_______________ Шафикова Г.И.
№ пр.116 от «29» августа 2022 г.

# Контрольно-измерительные материалы промежуточной аттестации и критерии оценивания

по государственному (башкирскому) языку
Республики Башкортостан
(название курса)

Уровень общего образования
(начальное, основное, среднее) начальное
Класс 2-4
Учителя : Магданова Д.М., Фахруллина Г.А.

2022 г

**Контроль -үлсәү материалдары**

2-се класс

Контроль күсереп яҙыу.

Тәбиғәттә

Бөгөн көн шундай матур ! Елдең әҫәре лә юҡ. Ҡояш ҡыҙҙыра. Урманда ҡоштар һайрай. Уҫаҡ япраҡтары әкрен генә ҡыштырлай. Алыҫта тумыртҡа туҡылдай. Танауға хуш еҫ бөркөлә. Сәскәләр араһында бал ҡорттары безелдәй.

1. Нимә тураһында һүҙ бара текста?
2. Текстҡа һеҙ ниндәй исем бирер инегеҙ?

( функциональ грамоталылыҡ буйынса эш)

Беҙҙең ауыл

Минең тыуған ауылым тау итәгендә ултыра. Тауҙар уны ҡышҡы әсе елдәрҙән, бурандарҙан һаҡлай. Тауҙан сылтырап шишмә аға. Тау итәгендә зифа ҡайындар үҫә. Ауылым халҡы йыл һайын мул уңыш үҫтерә.

1. Нимә? һорауына яуап биргән исемдәрҙе табырға.
2. Ауылығыҙ тураһында һөйләм төҙөгөҙ.

( функциональ грамоталылыҡ буйынса эш)

Контроль диктанттар.

Ярҙамсы

Әсәйем мине ярҙамсым, тип ярата.Сөнки мин сынаяҡтарҙы, тәрилкәләрҙе йыуам. Өҫтәлдең, ултырғыстың, шкафтың туҙанын һөртәм. Пальтомды, быймамды, күлдәгемде, башлығымды үҙ урынына ҡуям.

1. Ни эшләйем ? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табырға.
2. Һаналып килгән һүҙҙәрҙе табырға.

( функциональ грамоталылыҡ буйынса эш)

Мәктәптә

Беҙҙең мәктәп ҙур, яҡты, матур. Айрат менән Айгөл мәктәптә уҡый. Айрат математика, башҡорт теле дәрестәрен ярата. Ә Айгөл инглиз телен өйрәнә. Тыуған илгә белемле, файҙалы йәштәр кәрәк.

1. Исемдәрҙе табырға,аҫтына һыҙырға.
2. Текстҡа исем бирергә.

( функциональ грамоталылыҡ буйынса эш)

3-сө класс

Контроль күсереп яҙыу.

Өфө

Башҡортостандың иң матур ҡалаларынан береһе ул Өфө. Уның урамдары киң, оҙон. Өфөгә поезд менән, самолёт һәм пароход менән барып була. Күп ерҙәрҙән бында автобус менән киләләр. Өфөлә төрлө парктар, ял итеү урындары күп. Бындағы кино һәм театрҙарҙа һәр ваҡыт халыҡ күп була. Өфөнө ике яҡлап уратып Ағиҙел йылғаһы аға.

1. Рус теленән ингән һүҙҙәрҙе табып,аҫтына һыҙырға.
2. Ниндәй ҡала исемдәрен беләһегеҙ?

( функциональ грамоталылыҡ буйынса эш)

Контроль диктанттар

Төҙөүселәр

Бәләкәй малайҙар яр буйына килделәр. Бында төрлө таштар күп. Малайҙар таштан уйынсыҡ йорттар һалырға тотондолар. Нәжип өйҙө күкһел таштан төҙөнө. Булат һары таштан һалды. Малайҙар аҡ таштан магазин һалдылар. Аҙаҡ уҡытыусы, һатыусы булып уйнай башланылар.

1. Текста һүҙ нимә тураһында бара?
2. Кем? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табырға.

( функциональ грамоталылыҡ буйынса эш)

Күңелле

Ҡояш ҡыҙҙыра, көн бигерәк эҫе бөгөн. Тиҙерәк йылғаға барып сумаһы килә. Малайҙар һәм ҡыҙҙар күмәкләшеп йылға буйына киттек. Унда ифрат күңелле! Өйрәктәр, ҡаҙҙар йөҙә, йылғала балыҡтар уйнай.Ҡоштар һайрай . Һандуғас бик матур һайрай икән! Йәй көнө ауылда ныҡ күңелле була шул. Хуш еҫтәргә баштар әйләнә.Яратам мин йәйҙе!

1. Текстҡа ниндәй исем бирер инегеҙ?
2. Ҡоштар тураһында нимә беләһегеҙ?
3. Сәскә төрҙәрен һанағыҙ.

( функциональ грамоталылыҡ буйынса эш)

Контроль диктант

Яҙ башы

Яҙ килде. Бөтә тәбиғәт уянды. Беҙ кейемдәрҙе алыштырҙыҡ, ҡышҡы кейемдәрҙе һалдыҡ. Тәнәфестә беҙ тышта уйнайбыҙ. Йылы яҡтарҙан ҡоштар ҡайта башланы. Хәҙер улар оя яһайҙар. Ағастар япраҡ яралар. Колхозсылар яҙғы сәсеүгә төштөләр. Оҙаҡламай бөтә ер йәшел үлән менән ҡапланыр.

1. Текста нимә тураһында һүҙ бара?
2. Йылы яҡтан ниндәй ҡоштар ҡайта?
3. Ни эшләне ? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табығыҙ.

( функциональ грамоталылыҡ буйынса эш)

4-се класс

Танышыу

Таныш булайыҡ, мин- Айҙар. Фамилиям – Хәмитов. Миңә 10 йәш. Мин Өфө ҡалаһында йәшәйем. 3-сө класта уҡыйым.

Беҙҙең ғаиләлә 4 кеше: атайым, әсәйем, һеңлем һәм мин.

Атайымдың исеме Нур. Ул сервиста механик булып эшләй. Әсәйемдең исеме Гүзәл. Ул уҡытыусы булып эшләй. Һеңлемдең исеме Айгөл. Ул 1-се класта уҡый.

Ял көнө беҙ ғаилә менән баҡсаға, паркҡа, театрға йөрөйбөҙ.

Мин ғаиләмде бик яратам. (58 һүҙ)

1. Ғаиләгеҙ менән таныштырығыҙ.
2. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе әйтегеҙ.

( функциональ грамоталылыҡ буйынса эш)

Тәбиғәт

Минең олатайым тәбиғәтте бик ярата. Уны биш бармағы кеүек яҡшы белә. Миңә лә тәбиғәт тураһында ҡыҙыҡлы нәмәләр һөйләй. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен һеҙгә лә әйтәйем әле, дуҫтар.

Аяҙ көндәрҙә һәр сәскә билдәле бер сәғәттә тажын аса,татлы йоҡонан уяна. Мәк сәскәһе иртәнге сәғәт биштә асыла. Ә киске сәғәт етелә инде ябыла. Тәбиғәттең серҙәре ифрат күп. Уны аңларға,яратырға һәм һаҡларға кәрәк.*(59 һүҙ.)*

1. Текста нимә тураһында һүҙ бара?
2. Нимә? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табығыҙ.

( функциональ грамоталылыҡ буйынса эш)

**Ғәзиз ерем**

Минеғ ғәзиз тыуған илем бай һәм матур. Унда киң далалар һәм бейек-бейек тауҙар, урмандар бар. Илемдә тәрән диңгеҙҙәр, күлдәр һәм йылғалар ҙа бик күп. Төрлө үҫемлектәр, ҡыуаҡтар һәм ағастар шаулап үҫә.Урмандарында төрлө ҡоштар һәм йәнлектәр йәшәй. Иңләп- буйлап та булмай иркен еребеҙҙе. Илебеҙ ҙур ҙа, матур ҙа! Ә Башҡортостаныбыҙҙы туристар икенсе Швейцария менән тиңләйҙәр.Һоҡландырғыс һин,тыуған илем!

1. Текста нимә тураһында һүҙ бара?
2. Ни эшләй? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табығыҙ.

( функциональ грамоталылыҡ буйынса эш)

Көҙ етте

Бына алтын нурҙарға мансылып көҙ етте. Тәбиғәттә үҙгәрештәр башланды. Ағас япраҡтары төрлө төҫкә инә башланылар. Шыршы менән ҡарағай ағастары ғына йәшел төҫтәрен һаҡланылар. Осар ҡоштар йылы яҡҡа киттеләр, баҡсасылар мул уңыш үҫтергәндәр. Иген баҫыуҙарында тынлыҡ.Яҡшы уңыш йыйып алынған. Киләһе яҙға тиклем бөтә тәбиғәт

ял итергә әҙерләнә. Моңһоу ҙа, һағышлы ла миҙгел ул көҙ. Уҡыусылар ҙа көҙҙө һағынып көтә, сөнки уҡыу миҙгеле башлана.

**Башланғыс класс уҡыусыларының башҡорт теле буйынса белемдәрен, белеүҙәрен (умение) һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

**I.Телдән биргән яуаптарҙы билдәләү нормалары**

- 1. Балаларҙың уҡыу һәләтлектәрен баһалау.
- Уҡыу техникаһын тикшереү.
- Ижекләп уҡыу күнекмәләрен формалаштырыу. Уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе тотош уҡыу. Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе һәм ҡыҫҡа текстарҙы аңлы уҡыу. Дөрөҫ интонация һәм пауза менән уҡыу. Ҡыҫҡырып уҡыу.
- Ижекләп уҡыуҙан уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе аңлы рәүештә тотош уҡыуға күсеү. Эстән уҡыу.
- Эстән уҡығанда әҫәрҙең мәғәнәһен аңлау. Уҡыуҙың төрөн билдәләү. Текстан кәрәкле информация таба белеү.
- Балаларҙың уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:
-

| Класс | Һүҙ | Билдә | Эстән уҡыу |
|---|---|---|---|
| 2 | 30 - 40 | 100 - 120 | 35 - 40 |
| 3 | 40 - 50 | 120 - 140 | 45 - 65 |
| 4 | 50-60 | 140-160 | 65-75 |

- 2. Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары.
- Яҙма эштәрҙең төрҙәре:
- 1) һүҙҙәрҙе, фразаларҙы һәм һөйләмдәрҙе күсереү;
- 2) һүҙлек диктанты;
- 3) ғәҙәти диктанттар;
- 4) һорауҙарға яуаптар яҙыу;
- Һаналған яҙма эштәрҙең башланғыс кластарҙа үткәрелә торғандары элементар характерҙа, өйрәтеү маҡсатында һәм ныҡлы әҙерлектән һуң ғына яҙҙырыла. Әҙерлек эштәре төрлөсә булырға мөмкин: һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыр алдынан бер нисә тапҡыр телдән әйттереү, ниндәй хәрефтәр яҙылыуын анализлау, ҡағыҙәләрҙе ҡабатлау һ.б.
- Контроль характерҙағы яҙыу эштәренең һаны уҡыу йылы эсендә түбәндәгесә тәҡдим ителә:

| Эш төрҙәре | | | |
|---|---|---|---|
| | 2 кл. | 3кл. | 4 кл |
| Контроль күсереп яҙыу | 2 | 2 | 2 |
| Контроль диктант | 2 | 2 | 2 |
| Бөтәһе | 4 | 4 | 4 |

- Уҡыусыларҙың ҡаҙаныштарын баһалау инструментарийы.
- Мәғлүмәт сығанаҡтары:
- - уҡыусылар эшмәкәрлеге;

- - уҡыусыларҙың эштәре;
- - тест һөҙөмтәләре.
- Методтар:
- - күҙәтеү;
- - яуап һайлау;
- - ҡыҫҡа яуап;
- - башҡарыу процесын һәм һөҙөмтәһен баһалау;
- - портфолио.

Уҡыусының яуабын баһалағанда, түбәндәге критерийҙар менән эш ителергә тейеш:

1. Яуаптың тулы һәм дөрөҫ булыуы;
2. Үтелгәнде аңлы үҙләштереү, аңлау кимәле;
3. Яуаптың телмәр төҙөлөшө, әҙәби тел нормаларына ярашлы булыуы.

Уҡыусының телдән биргән яуабы үтелгән материалдың уҡытыусы тәҡдим иткән өлөшөнә логик эҙмә-эҙлекле аңлатманы эсенә алған бәйләнешле телмәр булырға, яуап биреүсе баланың өйрәнелгән ҡағиҙәләргә,билдәләмәләргә таянып эш итә белеүен күрһәтергә тейеш.

Әгәр уҡыусы:

1) Тәҡдим ителгән теманы тулы аңлатһа, тел төшөнсәләренә дөрөҫ билдәләмә бирһә;
2) Үтелгән материалды тулы аңлауын, белемдәрен практик ҡуллана белеүен күрһәтһә;
3) Материалды эҙмә-эҙлекле һәм әҙәби тел нормаларына ярашлы аңлатһа, уның яуабы **«5»** билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы «5» билдәһен ҡуйыу талаптарына ярашлы яуап бирһә, ләкин һирәк яһала торған хаталар ебәреп тә уҡытыусы иҫкәртеүенән һуң уларҙы төҙәтеп барһа, телендә, телмәр төҙөлөшөндә һирәк-һаяҡ яңылышлыҡтар китһә, уның яуабы **«4»** билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы тәҡдим ителгән темаға ҡараған төп төшөнсәләрҙе аңлауын һәм белеүен күрһәтһә, ләкин

1) Материалды тулы аңлата алмаһа, төшөнсәләрҙең һәм ҡағиҙәләрҙең билдәләмәһендә хаталар ебәрһә;
2) Әйткән фекерҙәрен тулы һәм иҫбатлауҙы нигеҙләй белмәһә, үҙ миҫалдарын килтерә алмаһа;
3) Яуабында эҙмә-эҙлелек һаҡланмаһа, телмәр төҙөлөшөндә хаталар булһа, уның яуабы **«3»** билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы һоралған материалдың күберәк өлөшөн белмәүен,билдәләмәләрҙе һәм ҡағиҙәләрҙе әйткәндә уларҙың төп фекерен боҙоуға килтерә торған хаталар ебәрһә, материалды икеләнеүҙәр менән системаһыҙ аңлатһа, уның яуабы **«2»** билдәһе менән баһалана.

Диктанттарҙы баһалау

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим иттеләр.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.

Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;

2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;

3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;

4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;

4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана.

«5» билдәһе — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

«4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

«2» билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

**Һаулыҡ буйынса мөмкинлектәре сикләнгән уҡыусылар өсөн баһалау формалары.**

***Уҡыу һәләтлектәрен баһалау:***

40-50 һүҙ 120-150 билдә 50-65 һүҙ-эстән уҡыу.

Яҙма эштәр: бирелгән текстарҙы күсереп яҙыу-40-50 һүҙ.

һүҙлек диктанты:15-20 һүҙ,

***Күсереп яҙыу бер генә билдә менән баһалана*.**

**«5»**-хатаһыҙ йәки тупаҫ булмаған 1орфографик, 2пунктуацион хата булған эшкә**.**

**«4»**-2 орфографик, 2 пунктуацион , 1орфографик, 3 пунктуацион.

**«3»**- 4 орфографик, 4пунктуацион, 3 орфографик, 5 пунктуацион,

**«2»**- 9 орфографик, 9 пунктуацион.

**«1»-** уҡытыусы ҡарамағында.

**Телдән яуаптарҙы баһалау:**

**“5” билдәһе ҡуйыла:**

-әгәр материалды аңлап, тулы яуап ҡайтарһа;

- белемен практик ҡуллана алһа ,аңлата белһә;

**“4” билдәһе ҡуйыла:** яуабында 1-2 хата яһап,үҙе төҙәтһә;

**“3” билдәһе ҡуйыла:** материалды аңлауын күрһәтһә, әммә

- тулы асып бирә алмаһа, төшөнсәләрҙә хаталар ебәрһә;
- үҙ фекерен миҫалдар менән нигеҙләй алмаһа;